

# Ғәли Соҡорой

## 1826-1889



Өфө губернаһы Бөрө өйәҙе Тәтешле волосының (хәҙер Башҡортостандың Тәтешле районы) Иҫке Соҡор ауылында тыуып

Ауыл мәҙрәсәһенен тамамлағас, күрше ауылдарҙағы ҙурыраҡ мәҙрәсәләрҙә һабаҡ ала.





Аҙаҡ Стәрлебаш мәҙрәсәһендә уҡый һәм 2 йыл самаһы шунда уҡ хәлфәлек итә.

Аҙаҡ Стәрлебаш мәҙрәсәһендә уҡый һәм 2 йыл самаһы шунда уҡ хәлфәлек итә. 1852 йылда ауылына әйләнеп ҡайта һәм ғүмеренең ахырынаса, йәғни 1889 йылдың 10 декабренә тиклем шунда йәшәй.

- Яҙыусының әҙәби мираҫы шаҡтай бай һәм күп яҡлы. Беҙҙең көндәргә ундан артыҡ баҫма китабы һәм йөҙгә яҡын ҡулъяҙма әҫәре килеп еткән. “Фосули әрбәға” (“Йылдың дүрт миҙгеле”) исемле шиғырҙар циклы, “Мәдхи Ҡазан” (“Ҡаҙанды маҡтау”), “Шәмғ әззия” (“Шәм яҡтыһы”) кеүек китаптары мәғрифәтте, мәҙәни үҫеште данлау, наҙанлыҡты, томаналыҡты тәнҡитләү рухы менән һуғарылған.

- Ғ. Сокоройҙоң яҙма мираҫында сәсмә әҫәрҙәр ҙә бар. Ундайҙарҙан “Хажнамә” исемле юлъяҙма, Ҡара Табын (Ирәкте) ырыуы башҡорттары шәжәрәһе һәм “Тәуарих-и Болғария, йәки Тәһриб-и Ғари” тигән әҫәр айырыуса әһәмиәтле.

# Һүҙлек эше:

- ләбибем-АҠЫЛЛЫ,ЗИРӘК
- Күндерҙе-КҮНЕКТЕРЕҮ, ЫЛЫҠТРЫУ.
- Сәғи-ТЫРЫШЛЫҠ
- Хафиз-ҺАҠСЫ

## Әҫәрҙәре буйынса һорауҙар:

- Ижады менән тормошон нисек бәйләп була?
- Әҫәрҙәре нисек яҙылған?
- Бала-сағы тураһында низәр һөйләй?